**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ СИБАЙ ҠАЛА ОКРУГЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**“ТИРМӘКӘЙ” БЕРЛӘШТЕРЕЛГӘН БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ**

***Үҙ белем кимәлен үҫтереү:***

# *"Иртә йәштәге төркөмдә балаларҙың үҫешендә сенсор уйындарҙың роле”*

**Әҙерләне:**
**Мәғәфурова Д. Д.**

## Инеш һүҙ

Иртә йәш төркөмө—сенсор тәрбиә өсөн иң ҡулай осор. Был осорҙа һиҙеү-тойоу органдары, тирә- йүн менән танышыу, ижади һәләтәрен үҫтереү өсөн тап сенсор тәрбиә ыңсай һөҙөмтәләр бирә.

Балаға сенсор тәрбиә биреү – унының күҙаллауын һәм предметтарҙың үҙенсәлектәре (формаһы, төҫө, күләме, йүнәлеше, еҫе, тәме) тураһында белемдәрен формалаштырыу. Иртә йәш осоронда сенсор тәрбиә биреүҙең баһаһын билдәләп бөткөһөҙ.Тап ошо осорҙа балалның тын алыу органдары формалаша, тирә- йүн тормош тураһында күҙаллауҙары туплана.

Сенсор тәрбиә маҡсатлы рәүештә сенсор процесстарҙы (тойоу, ҡабул итеү, күҙаллау) үҫтереү, камиллаштырыуҙы аңлата.Бала тормошта формалаарҙың күп төрлөлөгө, буяҡтар, предметтарҙың үҙенсәлектәре менә осраша. Шул уҡ ваҡытта художестволы сәнғәт (музыка, һүрәтләү, скульптура)менән таныша.

Әгәр ҙә баланың үҫеше педагог, ололар етәкселегендә алып барылмаһа, был үҫеш тулы түгел, өҫтөн генә буласаҡ. Ошо ваҡытта беҙгә эҙмә –эҙлекле, ябайҙан ҡатмарлыға табан сенсор тәрбиә ярҙамға килә.

## Актуаллелек

Баланың үҙен уратып алған тормошто өйрєнеүе, ҡабул итеүе өлкән кешенекенән ҡырҡа айырыла. өлкәндәр тормошто аҡыл менән ҡабул итһә, кескәйҙәр тирә-яҡты эмоциялар ярҙамында өйрәнә. Кескәй балаларҙың өйрәнеү әүҙемлеге, тәү сиратта, уның тормошто ҡабул итеүенә, фекерләүҙең символик функцияһына һәм эштәрҙе уйлап эшләүенә бәйләнгән. Был эштә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың тормошто күреп-белеүен, аңлауын, ҡабул итеүен үҫтереүҙә ярҙам итеү буйынса эштәр ҡаралған. Сөнки яңы белемде балалар тәбиғи белем биреү эшмәкәрлеге аша түгел, ә уйын ярҙамында яҡшы ҡабул итәләр. Был эш бик актуаль тип һанайым, сөнки ул тәрбиәселәргә балаларҙың белем даирәһен киңәйтеүҙә ярҙам итәсәк. Бала үҫешендә

сенсорик уйындар бик ҙур роль уйнай. Бала уйнап тирә- йүн менән таныша, үҙләштерә

***Маҡсат:***

Төрлө эшмәәкәрлектәр аша иртә йәштәге төркөм балаларының сенсор үҫешенә йүнәлеш биреү

***Бурыстар***:

- тема буйынса методик әҙәбиәт өйрәнеү;
- дидактик уйындар аша балаларҙың сенсор эталондар тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу;
- режим ваҡыттарында, продуктив эшмәкәрлектә тойоу һәләтен үҫтереү;
- тирә йүн донъяны ҡабул итеүҙә ыңғай эмоциялар тәбиәләү;
- ата- әсәләрҙең (законлы вәкилдәрҙең) иртә йәш осоронда сенсор тәрбиә биреү буйынса белем кимәлен арттырыу.
- уратып алған донъя, предметтар нигеҙендә һәр баланың белем даирәһен киңәйтеү;
- балаға үҙ аллы тирә- йүн тормошто өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыу;
- кесе йәштәге баланың сенсорик эталонын һәм сенсомоторик үҫешен уңышлы үҙләштереү.
- яңы тормош талаптарына таянып баланың тулы үҫешенә йоғонто яһау;
- үҙаллылыкты формалаштырыу;
- тойоу, һиҙеү, тактиль тойғолар үҫтереү;

## *Ошо йүнәлештә нимәләр эшләнелә?*

| **Педагогтың исем – шәрифәте** | **Вазифаһы** | **Үҙ белем кимәлен үҙләштереү темаһы** | **Отчет формаһы** |
|---|---|---|---|
| Мәғәфурова Дилә Данияр ҡыҙы | Тәрбиәсе | "Иртә йәштәге төркөмдә балаларҙың үҫешендә сенсор уйындарҙың роле" | Ата-әсәләргә памяткалар, консультациялар, папка йәймәләр |

| *Методик эштәр* | | |
|---|---|---|
| **Эш формаһы** | **Үтәү ваҡыты** | **Отчет формаһы** |
| Информация йыйыу, методик әсбәптәрҙе анализлау | сентябрь | ҡулланылған әҙәбиәт |
| Сенсор үҙәк ойоштороу | йыл буйы | сенсор тәбиә буйынса уйынсыҡтар әҙерләү |
| *Атә- әсәләр менән бәйләнеш* | | |
| Ата-әсәләргә сенсор тәрбиә менән бәйле анкета үткәреү<br>“НИмә ул сенсор тәрбиә?” | ноябрь | анкета |
| Ата-әсәләр йыйылышы үткәреү<br>“Иртә йәш осоронда сенсор тәрбиә биреү юлдары” | ғинуар | ата-әсәләр йыйылышының конспекты, фото отчет. |
| Консультация:<br>«Сенсор тәрбиә биреүҙә дидактик уйындарҙың роле» | март | консультатция йөкмәткеһе |

| **Балалар менән эш** | | |
|---|---|---|
| **Эш формаһы** | **Үтәү ваҡыты** | **Отчет формаһы** |
| Сенсор тәрбиә буйынса белем биреү эшмәкәрлеге | йыл буйы | Белем биреү эшмәкәрлеге |
| Традицион булмаған һүрәтләүҙә сенсор һәләт үҫтереү:<br>“Япраҡтар”,<br>“Төҫлө ямғырҙар”, | йыл буйы | Балалар эштәренән фотоотчет |

| | | |
|---|---|---|
| “Камҡа” | | |
| *Тактиль тойғолар үҫтереүсе дидактик уйындар*<br>- «Серле тоҡ»<br>- «Тотоп ҡарап бел»<br>- «Фигураны таны»<br>- «Парын тап» | йыл буйы | уйын конспекттары |
| ***Форма төшөнсәһен нығытыусы дидактик уйындар:***<br>- «Бирелгән формаға ҡарап тап»<br>- «Оҡшаш форманы тап»<br>- «Ниндәй фигура артыҡ?» | йыл буйы | уйын конспекттары |
| ***Күләм, оҙонлоҡ төшөнсәһен нығытыу буйынса дидактик уйындар.***<br>- «Ҙурлығы буйынса билдәлә»<br>- «Иң оҙон һәм иң ҡыҫҡа»<br>- «Төҫлө түңәрәктәр»<br>- «Өйөн тап?»<br>- «Алыҫ- яҡын» | йыл буйы | уйын конспекттары |
| ***Төҫтө нығытыу өсөн дидактик уйындар:***<br>- «Ниндәй төҫ юҡ булды?»<br>- «Ниндәй төҫтә?»<br>- «Сылбырҙы йый»<br>- «Ниндәй төҫтәр бар?»<br>- «Төҫөнә ҡарап тап» | йыл буйы | картотека |

***Ҡулланылған әҙәбиәт***


1. Бардышева Т. Ю. Здравствуй, пальчик. Пальчиковые игры. – М.: *«Карапуз»*, 2017.
2. Большакова С. Е. Формирование мелкой моторики рук: Игры и упражнения. – М.: ТЦ Сфера, 2016.
3. 4. Ермакова И. А. Развиваем мелкую моторику у малышей. – СПб: Изд. дом *«Литера»*, 2016.
4. Крупенчук О. И. Пальчиковые игры. – СПб: Изд. дом *«Литера»*, 2017.

5. Пименова Е. П. Пальчиковые игры. – Ростов-на-Дону: Феникс, 2017.
6. Тимофеева Е. Ю., Чернова Е. И. Пальчиковые шаги. Упражнения на развитие мелкой моторики. – СПб: Корона-Век, 2017.
7. Цвынтарный В. В. Играем пальчиками и развиваем речь – СПб: ИЧП *«Хардфорд»*,2016.